**Башkортостандың халыk яҙыусыhы З.Биишеваның тормошо həм ижадын өйрəнгəндə мəғлүмəти технологиялар kулланыу**

«Кеше ғүмере – akkан hыу. Шул ағышта hин үҙ булмышынды күрhəтə алдыңмы, халkым тип яндыңмы, хезмəтеңə hалған көс-ғəйрəтендəн, akыл-зиhененден сатkылар тамдымы, атkарған эшендəн күңелең kандымы? Бына ошо hорауҙар кеше ғүмеренə баhа биреүсе төп алымдарҙың береhелер», - ти билдəле ғалим Р. Аҙнағолов. Бөгөнгө йəштəргə үҙ тормошона kарата ла шундай мөнəсəбəт тыуҙырырға нисек өйрəтергə hуң? Аҙak үкенмəçлек итеп лайыkлы ғүмер кисерергə ниндəй «hуkмakтарҙы» hайларға?

Элек-электəн халkыбыҙ балаларҙы тəрбиəлəгəндə шундай ысулдар kулланған: йəштəргə өлгө булырҙай кешелəр тормошо менəн таныштырған, əҙəп-əхлəkkə өйрəтерлек төрлө əçəрҙəр - əкиəттəр, легендалар, хикəйəттəр hөйлəгəн. Беҙҙең башkорт яҙыусылары, уларҙың əçəрҙəре лə ошондай көс-kөҙрəткə эйə түгелме hуң?! З.Биишева, h. Дəүлəтшина, Ш. Бабич, М. Akмулла, С. Юлаев кеүек көслө шəхестəрҙең тормошо həм ижадынан күп нəмəлəргə өйрəнергə була. Улар беҙҙе рухландыра, ҙур эштəргə əйҙəй.

«З.Абдулловна кеүек шəхестəр халыkтың hүҙ сəнғəтенə яңы гəүhəрҙəр генə өçтəп kалмай, уның алдына яңы бурыстар kуя, kыуандырып kына kалмай, уйландыра, күңелдəргə йəм менəн бергə ғəм өçтəй, ил хəстəре менəн йəшəргə өйрəтə»,- тип яҙа билдəле шағир Р.Бикбаев. Ысынлап та, З.Биишева ижады - тауҙай хеҙмəт həм шуға торошло оло хөрмəткə лайыkлы kahарманлыk. Əзибəнең тормошон, əçəрҙəрен өйрəнеү аша Тыуған илгə тоғро хеҙмəт итеүҙең мəғəнəhен аңларға, килəсəк быуынды намыçлы, эшhөйəр, кешелекле булырға өйрəтəбеҙ

Тимəк, əҙəбиəт дəрестəренең бөгөнгө заман мəктəп уkыусыhын яҙыусы шəхесе өлгөhөндə həм əçəрҙəре аша тəрбиəлəү мөмкинлеге ҙур. Беҙҙеңсə, уkытыу процесында информацион-технологияларҙы kулланыу был мөмкинлекте арттыра ғына. Əлбиттə, тел həм əҙəбиəт дəрестəрендə уkытыусыны компьютер алыштыра алмай, сөнки ул – рухты тəрбиəлəүсе, йəштəрҙə кешелеклелек, намыç кеүек əхлəkи сифаттарҙы үçтереүсе, телгə,

тарихka, мәҙәниәткә ылыkтырыусы, hәм унын төп kоралы - тел, халkыбыҙҙын ынйы-hүҙҙәре. Ә мәғлүмәти технологиялар - электрон дәреслектәр, Power Point кеүек ғәмәли программалар, интернет селтәре, электрон китапханалар - ошо маkсатkа ирешеүҙә сара булып тора. Бөгөнгө сығышыма әҙерләнгәндә журнал, методик йыйынтыk hәм интернет селтәрҙәрендәге дәрестәргә күҙәтеү яhауым шуны күрhәтте: уkытыусылар әҙәбиәт дәрестәрендә БР мәғарифы министрлығы тарафынан раçланған эл. дәреслектәрҙе, тема буйынса үҙҙәре әҙерләгән йәки интернеттан алынған материалдарҙы, шул иçәптән презентацияларҙы, йышыраk kулланалар. Ысынлап та, уларҙа текст материалынын сағыу аудио, видео яҙмалар, hүрәттәр менән аралаштырылыуы, анимациялы эффекттарҙын kулланылыуы, белемде тикшереү өсөн тестар булыуы студенттарҙын теманы үҙләштереүенә ынғай йоғонто яhай. Әҙәбиәт уkытыусылары дәрестәрҙә мәғлүмәти технологияларҙы дәрестен төрлө этаптарында — дәрестен инеш өлөшөндә, hүҙлек эшендә, биографик белешмә биреүҙә, әçәрҙен йөкмәткеhен үҙләштереүҙә, белемде тикшереү hәм йомғаkлау мәлендә унышлы kулланалар. З.Биишева ижадына арналған конкурсkа тәkдим иткән эшебеҙҙә, мәçәлән, үҙебеҙ әҙерләгән презентацияны дәрестен бөтә этаптарында ла kулландыk. Был беҙгә әҙибә тормошо hәм ижады менән менән таныштырыуҙы ла, шиғырҙы анализлау эшен дә, тасуири уkыуҙы ойоштороуҙы ла hөҙөмтәлерәк үткәрергә мөмкинлек бирҙе.

Тәжрибә күрhәтеүенсә, юғары синыф уkыусыларынын hәм студенттарҙы төрлө өлкәлә белем донъяhына йәлеп итеүҙә компьютер технологияларын kулланып үҙ аллы эштәр — тикшереүҙәр, эҙләнеүҙәр башkарыу ҙа ҙур йоғонто яhай. Беҙҙен Туймазы педагогия колледжында студенттар мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары тәрбиәсеhе, практик информатик, башланғыс кластар уkытыусыhы, физик тәрбиә уkытыусыhы hөнәрҙәрен үҙләштерә. Яны федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптары буйынса улар мәғлүмәти технологиялар менән эшләү күнекмәләренә эйә булырға тейештәр. Шулай булғас, башkорт телендә презентациялар әҙерләү уларға телде өйрәнеүгә лә, буласаk hөнәрҙе үҙләштереүгә лә ынғай йоғонто яhай. Беҙҙенсә, презентациялар әҙерләү өсөн яҙыусыларҙын тормошо hәм

ижады буйынса темаларҙы һайлау отошло, сөнки йәштәргә был өлкәлә үҙ аллы белемдәрен арттырыуға, эҙләнеүгә мөмкинлектәр киңерәк.

Мәҫәлән, «Информатика» бүлеге студенттары менән беҙ дәрестә яҙыусылар тормошо һәм ижадын өйрәнеүгә бәйле презентациялар әҙерләйбеҙ. З.Биишева тормошо һәм ижады буйынса эште 4 этапkа бүлдек. Тәүге этапта студенттар үҙ аллы башkарыу өсөн темалар һайлай, презентацияларға kарата талаптар һәм баһалау критерийҙары менән таныша. Артабан тема буйынса өҫтәлмә мәғлүмәт туплай:

- З.Биишева биографияһын тулыраk өйрәнә,
- иҫтәлектәр менән таныша, цитаталар яҙып ала, шағирға арналған шиғырҙарҙы йыя,
- китаптарҙан, интернет селтәренән әҙиптең фоторәсемдәрен таба,
- темаға ярашлы әҙиптең шиғырҙарын һайлай,
- презентация өсөн йырҙар, көйҙәр, мәkәлдәр эҙләй һ.б.

Бөтә йыйылған материалдар электрон папкаға туплана.

2 этапта презентацияның композицияһын уйлайҙар, сценарий төҙөйҙәр. Слайдтың һанын, унда kуйыласаk иллюстратив материал, уға комментарий, текст материалдарын һайлайҙар. Был эштәр студенттың ижади һәләттәрен үҫтерә. Презентацияла текстарҙың башkорт телендә яҙылыуы уларҙың грамоталылығын арттыра.

3 этапта Power Point программаһы технологияларына ярашлы, презентация техник яktан әҙерләнә: шаблондар, слайдтар макеты, фон, анимация, бер слайдтан икенсе слайдkа күсеү эффекттары, көй, графика һайлана.

Аҙаkkы этапта студенттар презентацияға таянып үҙҙәренең темалары буйынса башkорт телендә сығыш яһарға әҙерләнә. Ижади отчет дәресендә эштәр менән танышабыҙ, уларҙы баһалау өсөн махсус карточкаларға таянып бергәләп балдар kуябыҙ. Бындай эштәрҙе башkарыу мәлендә студенттарҙың башkорт теле буйынса яҙыу, һөйләү күнекмәләре үҫә, әҙәбиәт, сәнғәт, фольклор, тарих кеүек төрлө өлкәлә белемгә эйә була, шулай уk компьютер программалары менән эшләү оҫталығы арта, ижади

һәләттәре үҫә. Иң мөһиме - З.Биишева хаҡында күберәк мәғлүмәткә эйә булалар, уның ниндәй бөйөк шәхес икәненә ныҡыраҡ төшөнәләр.

Шулай итеп, З.Биишева ижадын өйрәнеүҙә компьютер технологияларын ҡулланыу аша йәштәргә яҙыусы ижадына ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләнә, белемдәре арта, уларҙың танып белеү эшмәкәрлеге активлаштырыла, ижади һәләттәре үҫә, үҙ һөнәренә ҡарата ижади ҡараш булдырыла.